МУНИЦИПАЛЬ МӘКТӘПКӘСӘ БЕЛЕМ БИРЕҮ БЮДЖЕТ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ
БАЛА ҮҪТЕРЕҮ ҮҘӘГЕ – “АҠБУҘАТ” БАЛАЛАР БАҠСАҺЫ

Ата-әсәләр өсөн консультация:

# "Уйын – бала саҡтың алтын биҙәге"

Тәрбиәсе:
Солтанова Ф.Ә.

Сибай

**Уйын – бала саҡтын алтын биҙәге**

**Халҡыбыҙ борон-борондан киләсә быуынды тәрбиәләүгә ҙур иғтибар биргән. ”Ҡарға бутҡаһы”, ”Кәкүк сәйе” һәм башҡа байрамдарҙы, уйындарҙы балалар үҫешһен өсөн ойошторған.**

Көндәлек тормошта ла сабыйҙарҙың донъяны танып белеүендә, физик һәм рухи яҡтан үҫешендә, дуҫлыҡ, берҙәмлек хистәре тәрбиәләнеүендә, һәләттәрен асыуҙа, үҙ-ара мөнәсәбәттәр ҡорорға өйрәтеүҙәуйындар ярҙамҡа килә. Тәрбиә эшендә дөрөҫ алымдар ҡулланғанда ғына көслө һәм үҙ аллы шәхесте үҫтерергә мөмкин. Күп осраҡта тәрбиәне ололарҙан кескәйҙәргә бирелә торған белем тип тә ҡарайҙар. Бала иң элек ата-әсәһенә ҡарап фәһем ала, уларҙың ҡылыҡтарын ҡабатлай. Әлбиттә, һәр ата-әсә балаһының иң яҡшы, аҡыллы булыуын теләй. Бының өсөн үҙҙәре өлгө булып торорға тейеш.

Артабан тәрбиәгә балалар баҡсаһы, мәктәп кеүек белем усаҡтары булышлыҡ итә.

Халыҡ ижады өлгөләре – әкиәт, һөйҙөргөс, һамаҡлау, уйындар, мәҡәлдәр ҙә куркәм холоҡ тәрбиәләүгә юл аса.

Сибай ҡалаһының «Аҡбуҙат» балалар баҡсаһында кескәйҙәрҙе илһөйәр, телһөйәр, кешелекле, кеселекле, ололарҙы ихтирам итеүсе һәм башҡа бик күп матур сифаттарға эйә булыусы итеп тәрбиәләү өсөн эҙмә-эҙлекле эш алып барыла. Бының өсөн, тәрбиәсенең үҙенең дә ошо сифаттарға эйә булыуы мотлаҡ.

Сабый балалар баҡсаһына йөрөй башлау менән тәрбиәнең яңы мөмкинлектәре асыла. Бында тәрбиә һәм белем биреү эшмәкәрлеге милли педагогикаға таянып ойошторола. Мәктәпкәсә йәштәге учреждениела бала ишетеп кенә түгел, күреп, үҙе лә шунда ҡатнашып үҫә, тәрбиәләнә. Тәрбиә сюжетлы-ролле уйындар,

күргәҙмә-ҡулланыу материалдары, төрлө йүнәлештәге уйындар аша атҡарыла.

Балаларҙың өйҙә, балалар баҡсаһында ниндәй уйын уйнауҙарын күҙәтеп, белеп барыу мөһим. Уйындар, халыҡ ижадының бер өлгөһө булараҡ, баланы тормошҡа әҙерләргә, һөнәргә өйрәтергә, күркәм сифаттар тәрбиәләргә тейеш. Кешене белгең килһә – ҡылығына, баланы белгең килһә уйынына ҡара, тип юҡҡа әйтмәй бит халыҡ мәҡәле.

Бала уйнаған саҡта үҙен нисек тотһа, үҫеп еткәс, эштә лә үҙен ул шулай тотасаҡ. Киләсәккә нигеҙ уйнаған ваҡытта һалына. Сөнки уйын ниндәй ҙә булһа тормош рәүешенә өйрәнеү, шул тормощҡа инеү сараһы.